

*Сәлимйән БӘЗРЕТДИНОВ*

# Хәтерҙән юйылмаҫ миҙгелдәр

*Белорет металлургия комбинатына нигеҙ һалынғанға быйыл 240 йыл тулды. Белорет калаһы ла шунса вакыт билдәле. 1923 йылға хәтлем каланы Белорет заводы тип атап йөрөткәндәр. Романдарға һыймаҫ тарихи вакиғаларҙы, меңәрләгән кеше яҙмышын үҙенә һеңдергән был осор. Әле ошо осорҙоң кайһы бер иң мөһим мәлдәренә, айырыуса металл әйберҙәр етештереү үҫешенә кыҫкаса күҙәтеү яһайык.*

Уралдың тимер һәм баҡыр рудалары рустар тарафынан XVII быуаттың урталарында уҡ файҙаланыла башлаған, Петр I батша тәхетенә ултырғас, ҡаҙна заводтарын төҙөү бигерәк тә көсәйгән һәм һуңынан да руда эшкәртеүгә иғтибар артҡандан-артҡан. Ә инде XVIII быуаттың уртаһында Башҡортостанда 28 баҡыр иретеү һәм тимер эшләү заводы иҫәпләнгән. Сембер сауҙагәрҙәре Иван Борисович Твердышев, Иван Семенович Мясников иң эре завод хужалары булып торған. Берг-коллегияның 1759 йылдың 6 майында сығарған ҡарары буйынса улар Белорет заводын иң тәүҙә Тирләндә төҙөй башлай. Әммә урын уңайһыҙ булыу сәбәпле, 1762 йылда завод Белоретҡа күсерелә. Бер домналы һәм бер нисә сүкешле завод, 1767 йылда төҙөлөп бөтөп, тәүге суйын иретмәһен бирә. Шулай итеп, 1762 йыл — Белорет металлургия комбинаты тыуған йыл.

XIX быуат башында Уралдың тау-металлургия сәнәғәте торғонлоҡ осоро кисерә, металл кәрәк-яраҡтар етештереү кәмей. Шулай ҙа шәхси баҡыр иретеү заводтары хужаларының йыллыҡ төшөмдәре 25-74 процент, тимер эшләү заводтарының 40 проценттан ашыу тәшкил итә. Утыҙынсы-ҡырҡынсы йылдарҙа тау эштәре ҡабаттан йәнләнә башлай, Белорет һәм Тирлән заводтарында ла баҡыр иретеү арта. Быуат аҙағында тау-завод сәнәғәтендә акционерҙар йәмғиәттәре барлыҡҡа килә. 1874 йылда ойошторолған Пашковтарҙың Белорет тимер эшләү заводтары йәмғиәтенә Белорет, Тирлән, Үҙән заводтары ҡарай. Пашков 90 проценты урмандар булған 256 мең десятина ер ҙә биләй. 1899 йылда төҙөлгән Инйәр тау-завод йәмғиәте Инйәр һәм Лапышты заводтарын үҙ эсенә ала. Һуңыраҡ Вогау фирмаһына ҡараған Белорет заводтары йәмғиәте сауҙа итеү өсөн Рус һәм Азов-Дон банктары менән бәйле булған. 1916 йылдың йәйендә Белорет заводтары яңы хужалар ҡулына — Коломна һәм Сормово машиналар эшләү акционерҙар йәмғиәттәренә күскән. Уларҙы халыҡара һәм иҫәп-ссуда банкылары финанслаған. Ғөмүмән, Белорет, Инйәр, Әҫем (Сим) акционерҙар йәмғиәттәре рус капиталын үҫтергән.

Суйын иретеү, тимер эшләү менән бергә башҡа кәсеп-шөғөлдәр ҙә тыуа. Рәссәйҙә металл кәрәк-яраҡтарға ихтыяж артҡас, Белорет тимер эшләү заводтары йәмғиәте 1884 йылда Нура йылғаһы буйында сымсөй яһау фабрикаһы төҙөй. Өс йылдан һуң ул янып юҡҡа сыҡҡас, Ҡағы суйын заводы эргәһендә тағы ла ҙурыраҡ производство асыла. Бында йылына 4500 танна сым, 3300 тонна ҡаҙаҡ, 1650 тонна ыр-

ғаҡ эшләп сығарыла. Ошо металл әйберҙәр ылау менән Белоретҡа, унан тимер юл үткән Вязовая, Мейәс аша ҡулланыусыларға оҙатыла. Байтағы иһә яҙ ваҡытында баржаларға тейәп Ағиҙел, Кама, Волга буйлап Нижний Новгородҡа алып барыла һәм унда йыл һайын үткәрелгән йәрминкәлә һатыла. Янғын сығып, Ҡағылағы фабрика янғас, сым-сөй яһау заводы 1912-1914 йылдарҙа йәнә Белоретта төҙөлә. Завод электрлаштырыла, цехтарҙа ул замандағы алдынғы ҡорамалдар ҡорола, төрлө тәғәйенләнештәге кирбес йорттар ҙа һалына. Улар беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланған һәм әле лә файҙаланыла. Шулай итеп, хәҙерге ҡорос сым-канат производствоһы ошо завод нигеҙендә барлыҡҡа килә.

1910-1914 йылдарҙа ауыр сәнәғәттең күтәрелеүенә тимер юлдар төҙөүҙең үҫеше лә булышлыҡ итә. Башҡортостандың тау-завод сәнәғәте үҙәгенә әүерелә барған Белоретҡа ла был ваҡытта тар колеялы Һатҡы—Тирлән—Белорет тимер юлы һалына. Беренсе донъя һуғышы башланғас, тау-завод производствоһы тәүге сиратта хәрби маҡсаттарға эште бора. Белорет һәм Тирлән заводтары иһә сәнскеле тимер сым, телеграф сымы, шулай уҡ Путилов, Обухов заводтары һәм башҡалар өсөн ҡорос әҙерләмәләр етештерә. Белорет акционерҙар йәмғиәте заводтарында 1916 йылда 1914 йыл менән сағыштырғанда хәрби маҡсаттар өсөн сым етештереү 155 процентҡа, сортлы тимер 99 процентҡа арта, шул уҡ ваҡытта түбә ҡалайы эшләп сығарыу 36,5 процентҡа кәмей.

1917 йылда һәм граждандар һуғышы йылдарында тау-завод сәнәғәте ҡыҫҡарыуға, торғонлоҡҡа дусар була, Белорет заводтарында ла суйын, ҡорос иретеү, металл әйберҙәр етештереү ифрат ныҡ кәмей. Әйтәйек, сым-сөй заводында 1916 йылда 21900 тонна металл әйберҙәр етештерелһә, 1920 йылда ни бары 2650 тонна ғына эшләп сығарыла. Производствоны ҡайтанан аяҡҡа баҫтырыу саралары күрелә башлай, сәнәғәт менән идара итеү үҙгәртеп ҡорола, Белорет заводтары Урал сәнәғәт бюроһына буйһондорола. Ил металл кәрәк-яраҡтарға, ҡорал-ҡорамалдарға ҡытлыҡ кисерә. Ошо ауыр ваҡытта Белоретта ҡорос сым етештереү производствоһын үҙләштерергә ҡарар ителә. Быға саса ҡорос сым сит илдәрҙән килтерелгән катанканан аҙ ғына күләмдә Мәскәүҙәге «Серп и Молот» һәм Ленинградтағы «Красный гвоздильщик» заводтарында ғына эшләп сығарыла.

Ике йылдан ашыу эҙләнеү, лаборатория тикшереүҙәре, производствола һынауҙар һөҙөмтәһендә ҡорос сымды термик эшкәртеү буйынса инглиз патентының сере асыла. Был асыш Ватандың метиз тармағында техник революцияға тиң була. Белорет металлургтары үҙләштергән ысул хәҙер бөтә метиз заводтарында ҡулланыла. Белоретта иһә ҡорос сым алыу өсөн тәүге мейес 1921 йыл аҙағында төҙөлә башлай. Йәнә ҡорос, сым производствоһы 1926-1927 йылдарҙа илдә беренсе булып сымды һабын порошогы һөртөп һуҙыуға күсә. Күрелгән саралар һөҙөмтәһендә ҡорос сым эшләп сығарыу арта һәм уның сифаты ла яҡшыра.

Тарҡалған хужалыҡты аяҡҡа баҫтырыу, үҫтереү, илде индустриялаштырыу өсөн һәр тарафта төҙөлөш барған мәлдә һығылмалы ҡорос арҡандар етештереү ҙә көнүҙәк мәсьәләләргә әйләнә. Шуға ла Белоретта канат етештереү ҡорамалдарын монтажлау һәм технологияһын үҙләштереү эше башлана. 1926 йылда беренсе канат участкаһы файҙаланыуға тапшырылып, 134 тонна ҡорос арҡан эшләп сығарыла. Белоретта ҡорос сым, канат етештереүҙе арттырыуға киңерәк мөмкинлектәр булдырыла, һөҙөмтәлә тау һәм нефть сәнәғәте өсөн уларҙы сит илдәрҙән алыу ныҡ кәмей. Бына шулай фиҙакәр хеҙмәттәре менән яңынан-яңы уңыштарға өлгәшә Иҙел башының утлы һөнәр оҫталары. Ҡорос сым етештереүселәрҙең II Бөтә Союз съезы 1929 йылда Белоретта үтә. Унда Белорет сымының үҙенең үҙенсәлектәре буйынса сит илдәрҙекенән ҡалышмауы билдәләнә. Сымды эшкәртеү тәңгәлендә ғилми-тикшеренеү эштәренә

иғтибарҙы тағы ла көсәйтергә, канаттың төрҙәрен арттырырға ҡарар ителә. Съездан һуң үҙ һөнәрҙәренең оҫталары тағы ла илһамланыбыраҡ эшкә тотона. Цинкланған сым, кард сымы етештереү сафҡа инә. Ғөмүмән, тәүге биш йыллыҡта сым етештереү 3,6, ҡорос канаттар эшләп сығарыу 6 тапҡырға арта.

Үҙәк органдарҙың ҡарары буйынса 1931 йылда Белорет заводтарын нигеҙенән реконструкциялау башлана. Тәүге сиратта 1-се домнаның ҡорамалдары яңыртыла, 2-се домна, шулай уҡ мартен мейестәре үҙгәртеп ҡорола, металл ҡойоу механикалаштырыла. Энергетика хужалығы, завод эсендәге транспорт та яңыртыла. Сым-сөй производствоһын үҙгәртеп ҡороу һөҙөмтәһендә асылда яңы ҡорос сым-канат заводы сафҡа инә. Тирлән табаҡлы-прокат заводы яңырып, ябай түбә ябыуы етештереүҙән юғары сифатлы тимер табағы эшләп сығарыуға күсә. Яңы металл кәрәк-яраҡтар етештереү һәр йәһәттән дә отошло була. Әйтәйек, сифатлы ҡоростан канат һәм башҡа нәмәләр эшләп сығарыу 1932 йылда ғына 800 мең һум валюта экономияларға мөмкинлек бирә.

Белорет заводтарында юғары сифатлы металл, юғары сортлы ҡорос сым, канат производствоһын үҙләштереү бурысы ҡуйыла. 1933—1934 йылдарҙа завод лабораторияһы ойошторола. Металл әйберҙәрҙең яңы төрҙәрен етештереү өсөн ҡеүәтле һынылыш башлана. Нәҙек ҡорос арҡандар етештереү технологияһын эшләүгә ныҡышмалы тотоналар. 1936 йылда яңы цех файҙаланыуға тапшырылып, тәүге нәҙек ҡорос арҡандар ҡулланыусыларға оҙатыла. Шунан тағалмаусан ҡорос арҡандар, ифрат та юғары ҡаршылыҡлы ҡорос сым... Хәрби производство киңәйеүе менән сифатлы металдарға айырыуса ихтыяж арта. Йәнә шул ваҡиғаны ла телгә алып үтәйек: 1940 йылда суйын, ҡорос иретеү производствоһы, металл эшкәртеү, ҡорос сым-канат заводтары комбинатҡа берләшә. 1941 йылдың аҙағына Белорет мартендары тулыһынса марганецлы, хромлы ҡорос һәм башҡа сифат яғынан юғары ҡорос иретеүгә күсә. Әйткәндәй, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда беҙҙең илдә яһалған металл Германия металлургия сәнәғәтенекенә ҡарағанда сифаты буйынса өҫтөн тора. Бында Белорет металлургтарының өлөшө лә тос була. Белорет ҡорос сым-канат заводы оборона сәнәғәте өсөн ифрат та кәрәкле шариклы подшипник, пружина, хромлы ванадий, серебрянка сымдары, ҡорос арҡандар әҙерләй. Тирлән заводы сифатлы йәйенке ҡорос табаҡ прокатлай. Улар һуғыш ҡоралдары әҙерләү производствоһын булдырыуҙа бик ҙур әһәмиәткә эйә була.



Һуғыштан һуң һәм артабан да Белорет маталлургтарының халыҡ хужа-

лығын күтәреүгә, индустриаль үсеште тиҙләтеүгә, Ватан металлургияһын үстереүгә индергән өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Фиҙакәрлек шунда ла асыҡ күренә: халыҡ хужалығын тергеҙеүҙең һәм үстереүҙең дүртенсе биш йыллыҡ планын Белорет металлургия һәм ҡорос сымканат заводтары хеҙмәт коллективтары өс йылдан да ҡыҫҡараҡ ваҡыт эсендә тормошҡа ашыра. Ҡарашты иртәгәһе көндәргә төбәп, өмөттө тормош-көнкүрештең яҡшырыуына бағлап, хеҙмәт етештереүсәнлеге күтәрелә, производство технологиялары камиллаштырыла, яңылары индерелә, йәшәгән осор талап иткән төрлө тәғәйенләнештәге металл кәрәк-яраҡтар етештереү көн үҙәгенән төшмәй. Әйтәйек, 1950 йылда электротехника, радиотехника өсөн микроүлсәмдәге сымдар, һуңыраҡ пружина таҫмалары, сәғәт пружиналары эшләнә башлай.

Эҙләнеү артынан эҙләнеү ҡыуаныслы хеҙмәт һөҙөмтәләренә килтерә. Белорет ҡорос сым оҫталары илдә беренсе булып автомобиль, авиация шиндарын һәм башҡа резина-техник нәмәләрҙе конструкциялау-көсәйтеү өсөн еҙләнгән сымдан металлокорд етештереүҙе үҙләштерә. Цех төҙөлөп, тәүге продукция 1961 йылда алына. Быға са комбинаттың уйлап табыусылар төркөмө сымды еҙләүҙең термодиффузион ысулын индерә. Нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, ошо ысулды Япония ҡуллана. Ә белореттарҙың металлокорд әҙерләү технологияһын Германия һатып ала. Уны Волгоград, Жлобин, Магнит, Силәбе һәм башҡа метиз заводтары ла үҙләштерә. Яңы марка ҡорос, уникаль «150» станында сыҙамлы һәм һығылмалы катанка, легирланған сымдар, заманса ҡорос арҡандар, халыҡ ҡулланыуы тауарҙары — бөтәһе лә Белорет металлургтарының фиҙакәр хеҙмәт ҡаҙанышы. 240 йыл буйына тупланған ҡаҙаныштарҙы бәләкәй мәҡәләлә күрһәтеү мөмкин дә түгел. Мәгәр уңыш-ҡаҙаныштар, алтын ҡуллы оҫталарҙың, уйлап табыусыларҙың исемдәре комбинат тарихына алтын хәрефтәр менән яҙылған.

Хәтһеҙ йылдар үтһә лә изге эштәр онотолмай. Ижад рухы һүнмәүе, нығыраҡ балҡыуы тағы ла ҡыуаныслыраҡ. 80-90-сы йылдарҙа Белорет металлургия комбинаты 150 төр марка, 35 мең сорт позицияһы буйынса металл, металл әйберҙәр, халыҡ ҡулланыуы тауарҙары етештерә. Улар бик күп илдәргә, республикаларға ебәрелә. Метиз әйберҙәре менән Белорет металлургтары донъя баҙарына сыҡты. Баҙар мөнәсәбәте шарттарында улар үҙгәртеү-яңырыуға, тормош, заман талап иткән кәрәк-яраҡтар етештереүгә ынтыла.

Баҙар иҡтисады шарттарында металлургия сәнәғәте үҙгәртеп ҡороуға мохтаж. Шуны аңлап, 2002 йылдың ғинуарында Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтов үткәргән кәңәшмәлә «Белорет металлургия комбинаты» асыҡ акционерҙар йәмғиәте акцияларының дәүләт пакетына идара итеү программаһы ҡаралды. Етештерелгән металл прокатының үҙкиммәте юғары, кредитор бурысының ҙур булыуы, социаль мәсьәләләрҙең киҫкенләшеүе айҡанлы республиканың Министрҙар Кабинеты предприятиены финанс яҡтан һауыҡтырыу буйынса саралар эшләне.

Белорет металлургия комбинаты акцияларының дәүләт пакеты 2001 йылдың сентябрендә «Мечел-Инвест» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең ышаныс идаралығына тапшырылғайны. «Мечел» етәкселеге ҡорос иретеү производствоһын үҙгәртеп ҡороу һәм ҡайтанан техник йыһазландырыу программаһын, уны тормошҡа ашырыу сараларын тәҡдим итте. Комбинат Белорет ҡалаһы халҡының төп эш урыны булыуын иҫәпкә алып, уның иҡтисади мәсьәләләрен социаль хәстәрлектәр менән берлектә хәл итеү бурысы ҡуйыла. Киләсәктә лә ижад, дәрт, йүнселлек юлдаш булһын һеҙгә, металлургтар!